# Алтын тамсы

УДК 821.512.141-34-93
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4
А50

Рәссамы *Марат Ғәйнетдинов*

А50 Алтын тамсы : башҡорт халыҡ әкиәттәре. — / Өфө : Китап, 2017. – 24 бит.

ISBN 978-5-295-06811-9

«Тамсы ни өсөн алтын?», «Моңдоң сере ниҙә?», «Бәхет ни өсөн юлда табылған?» — тиһәгеҙ, серле, тылсымлы, мауыҡтырғыс әкиәттәр иленә рәхим итегеҙ, кескәйҙәр!

**УДК 821.512.141-34-93**
**ББК 84 (2 Рос=Баш)-4**

**ТП —143/17**

**ISBN 978-5-295-06811-9**

© Зәйтүнова Р. М., төҙөү, 2017
© Ғәйнетдинов М. М., һүрәттәр, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Алтын тамсы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Моң сере . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11
Юлда табылған бәхет . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 15

Литературно-художественное издание

**ЗОЛОТАЯ КАПЕЛЬКА**

Башкирские народные сказки

*(на башкирском языке)*

Әҙәби-нәфис баҫма

**АЛТЫН ТАМСЫ**

Башҡорт халыҡ әкиәттәре

Төҙөүсеһе Р. М. Зәйтүнова

Мөхәррире *Ә. Н. Әсәҙуллина*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректоры *А. Х. Хәкимова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 26.10.2017. Форматы 60×84 $^{1}/_{8}$. Мелов. ҡағыҙы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Прагматика гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 2,79. Шартлы буяу отт. 13,02. Иҫәп-нәшер таб. 2,22.
Тиражы 1500 дана. Заказ 1.0172.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

## АЛТЫН ТАМСЫ

Борон-борон заманда Янһары тигән бер кеше булған, ти. Ул мал аҫрап, ете ерҙә йәйләп, биш ерҙә ҡышлап йөрөгән. Бик тырыш булған Янһары – көн тимәгән, төн тимәгән, эшләгән дә эшләгән. Шуға күрә ул етеш көн иткән.

Берҙән-бер көн Янһары үлеп киткән. Унан Ялбыр исемле маҡтансыҡ бер малай тороп ҡалған. Күп ашаған, күп йоҡлаған, ҡулына эш тотмаған был малай. Донъя үҙенә ҡалғас, Ялбыр иркенләп йәшәй башлаған. Көн дә ҡунаҡ йыя, ти, был, ҡурайсылар саҡыра, ти, йырсылар килтерә, ти, бейеүселәр алып килә, ти. Уйын-көлкөгә һәүәҫ булғандар бының тирәһенән бер ҙә өҙөлмәйҙәр, ти. Дуҫ-иш бик күбәйеп китте, ти, бының, барыһы ла ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп маҡтайҙар, ти, уны. Эй ҡуҡрая, ти, Ялбыр, эй ҡуҡрая, ти. Маҡтап бер һүҙ әйткәнгә – бер ат, ҙурлап көй сығарғанға ике ат тоттора ла ебәрә, ти. Шулай тарата торғас, әкренләп бының бары бер аты, бер һыйыры ғына тороп ҡалған. Ә ул уйлап та бирмәй, ти, һаман эшләмәй, ашай ҙа йоҡлай, ти, ашай ҙа йоҡлай, ти.

Ырыуҙың олпатыраҡ ҡарттары, килеп, был егетте өгөтләп тә ҡарайҙар, ти, ә теге һаман ҡолаҡ һалмай, ти. Ҡарттар әйтә:

– Ялбыр ҡустым, малыңды самалабыраҡ тот, бөлөрһөң бит.

Тинтәк Ялбыр, күп уйлап тормай, яуап ҡайтара:

– Бөлһә, ни була?

– Бөлһәң, шул була, – тиҙәр ҡарттар, – бөлһәң, малың бөтөп китер. Мал табыуы бик ауыр ул.

Теге тинтәк тағы үҙенсә яуап ҡайтара:

– Һәй, мал бөтә тиме ни! Йыл һайын бейә ҡолонлап тора, яҙ етте иһә, һыйыр быҙаулап тора. Ни эшләп бөтһөн, ти, мал!

Ҡарттар, ҡул һелтәп, китәләр ҙә баралар. Ә Ялбыр һаман шулай бошонмай йөрөй бирә, ти. Шунан, күп тә үтмәй, тинтәк Ялбыр шыпа бөлгән дә ҡуйған, ти. Инде хәҙер малы ла юҡ, малы булмағас, тегенең янында дуҫ-иштәре лә юҡ. Ни эшләмәк кәрәк? Тора ла был, аҡтыҡ атын менеп, ил гиҙергә сығып китә.

Эй бара, ти, был, эй бара, ти, бара торғас, бер туплауға барып сыҡҡан, ти. Туплауҙа ятҡан малды күргәс, быны̧ң күҙе шарҙай булып киткән, ти.

– Һай, һай, – тип ҡысҡырып ебәргән, ти, был, – мал табыуы ҡыйын, тигән булалар. Бына бит ҡайҙа ғына ятҡан ул мал!

Шунан тинтәк Ялбыр малды туплауҙан ҡуҙғатып алып китергә уйлап тора икән, сыбыртҡыһын шартлатып аҡ һаҡаллы бер ҡарт килеп сыҡҡан.